ISSN 2712 - 861X

# Бәрәкәт

Мәҙәни мәғрифәт журналы



10 (58) 2024

podpiska.pochta.ru

## Гөлсәсәк МОСТАЕВА:

# “Кемде кемгә димләргә, тип уйланмаған мәлем юҡ”



Нәсих Хәлисов фотоһы.

Һәр ғаилә – йәмғиәттең бер күҙәнәге, тимәк, ирле-ҡатынлылар һәм улар араһында бәхетлеләр ни тиклем күберәк булһа, милләтебеҙ шул хәтлем именерәк, көслөрәк. Әммә, үкенескә күрә, бөгөн өйләнмәй йөрөүселәр, ғаилә тормошонан уңмай, айырылышыусылар, балаларын яңғыҙ тәрбиәләргә мәжбүрҙәр байтаҡ. Йыш ҡына йәштәр, ғашиҡлыҡтан баштары әйләнепме, бер-береһенең холҡона әллә ни ҡарап тормайса ғаилә ҡора ла, бергә оҙаҡ донъя көтә алмай. Шундай хәлдәр тураһында ишеткән һайын “Димләү йолаһын тергеҙеү яҡшы булмаҫ инеме икән?” тигән һорау тыуа.

Ошо мәсьәләне Өфөлә йәшәүсе тәжрибәле димсе, ике бәләкәс бала әсәһе Гөлсәсәк Мостаева менән тикшерәбеҙ. Ул биш йыл элек “Бәйләнештә” ижтимағи селтәрендә буйҙаҡтарҙы таныштырыу, ҡауыштырыу маҡсатында “Осрашыуҙар көтәм” тигән төркөм асып ебәргәйне, әле лә шул юҫыҡта эш алып бара.

podpiska.pochta.ru

**– Гөлсәсәк, ғәҙәттә, йәш әсәләр ғаиләгә бер аҙ килем булһын тип тотона теге йәки был эшкә. Ә һиңә был “кәсеп”тән файҙа бармы һуң?**

– Бар, бар, сауапты күнәкләп алып торабыҙ (*көлә*)! Файҙа, бәрәкәт – матди килем генә түгел бит, ул күңел бөтөнлөгө лә, дәрт тә, илһам да, үҙең менән ҡәнәғәтлеккә табан юлда тағы бер аҙым да. Мөслимә булараҡ, миңә Аллаһ Тәғәләнең ризалығы өсөн эшләүҙән дә килемлеләргә, күркәмерәге юҡ. Төркөмдө асҡан ғына мәлдә һәр намаҙҙан һуң доға ҡыла инем, хәйерле эш булһын, тип. Унан бит әле хәләл ефетемдең ризалығы ла кәрәк. Уның рөхсәтенән башҡа эшләү шулай уҡ бәрәкәтһеҙ булыуы мөмкин.

Төпкәрәк ҡаҙғанда иһә, иң тәүге уйым дини талаптарҙы үтәгән генә яңғыҙҙарҙы таныштырыу, димләү ине. Шулай башларға булдым да, уйлап ҡараһам, көндәлектә насар ғәҙәттәрһеҙ, ихлас күңелле, йәштәре утыҙға яҡынлаған күпме яңғыҙ ҡыҙҙарҙы осратам мин?! Уларҙың эргәһенән ниндәй йөрәк менән үтеп кенә китәйем ти?! Был һылыуҙарҙы ла алырға булдым, төркөмдә улар хаҡында яҙып сыҡтым. Әгәр, исмаһам, бер ғаиләнең генә Аллаһ ризалығы өсөн ғаилә ҡороуына сәбәпсе булам икән, миңә башҡа файҙа, килем кәрәкмәй ҙә. Ошо никах минең изге эштәрем биҙрәһенә бер суҡ сейә кеүек кенә төшөп ятһа, артығы нимәгә?

**– Белеүемсә, һин үҙең дә, ирең дә электән намаҙҙаһығыҙ. Ә һеҙҙең танышыу нисегерәк булды?**

– Эйе, Аллаға шөкөр, икебеҙ ҙә хаҡ юлыбыҙҙы тапҡанбыҙ. Башҡаса тормош иптәшен күҙ алдыма килтерә лә алмайым кеүек. Төрлө киң мәғлүмәт сараларында ҡыҙғаныу, көнләшеү арҡаһында тыуған ыҙғыштарҙы күреп ҡалһам, үҙебеҙҙең тыныс ғаилә тормошо өсөн Раббыбыҙға йөнә шөкөр ҡыла һалам. “Ҡайҙа йөрөйһөң?”, “Ни өсөн аҡса алып ҡайтмайһың?” кеүек һорауҙар менән баш ҡатыраһы түгел. Бер-беребеҙҙе сәбәпһеҙ ҡыҙғанмайбыҙ, тикшермәйбеҙ, һағаламайбыҙ, тигәндәй, сөнки икебеҙҙең дә никах мәлендә Аллаһ Тәғәлә алдында биргән һүҙебеҙ бар. Тоғролоҡ, сит күҙҙәрҙән һаҡлап ҡына йөрөткән үҙ хистәребеҙ, мөхәббәтебеҙ, донъябыҙ бар. Мосолман ғаиләләре өсөн, заманса телдә әйткәндә, күпме лайфхак бирелгән! Иреңде тыңла, ҡатыныңды илатма, йома көн тәмлекәстәр алып ҡайт, әсәйеңдә ихтирам ит, ҡатыныңа файҙалы белем бир, йәреңдә артыҡ үҙгәртәм тип тә тырышма... Һанай китһәң, үҙе бер тормош китабы.

Беҙҙең танышыу ғәҙәти ҙә, мөғжизәле лә кеүек булды ул. “Бер ҡыҙ мосолман егет менән танышырға теләй” тигән һылтау менән телефон номерымды Азатҡа еткергәндәр. Ул миңә яҙҙы, шулай байтаҡ хат-хәбәр аша аралаштыҡ, таныштыҡ. Рамаҙан айы үткәс, тәүгә күрештек. Беренсе осрашыуҙа уҡ ул мине үҙенең тыныслығы, иплелеге менән арбаны. Оҙаҡҡа һуҙмай, мине ата-әсәһе менән таныштырырға йыйыныуы хаҡында әйтте. Шулай ҡоролдо беҙҙең ғаилә. Әлеге мәлдә Гөлсөм исемле ҡыҙ һәм Амин тигән малай үҫтерәбеҙ.

**– Эшегеҙҙең тәртибе, шарттарығыҙ менән таныштырып үтһәңсе. Сер булмаһа, ниңә күпмелер ваҡытҡа димселек эшенән ял итеп алдығыҙ?**

– Башта яңғыҙым эшләнем. Парһыҙҙар миңә үҙҙәре хаҡында яҙып, шәхси хәбәр ебәрһә, мин шуны иғлан рәүешенә индереп, номер беркетеп, төркөмгә ҡуя инем. Исем-шәриф, телефон һандары күрһәтелмәй. Кемдер берәй иғландағы кеше менән танышырға теләй икән, ул минән хат аша өҫтәмә мәғлүмәт ала. Төркөм киңлегендә шулай уҡ ғаилә ҡороу темаһына яҙмалар, кәңәштәр ҡуйып барҙым, ҡыҙыҡлы танышыу тарихтарын халыҡ айырыуса яратып уҡыны.

Әлбиттә, ваҡытты ла, энергияны ла күп талап итә димселек: һәр кешенең яҙмышын, тойғоларын күңелең аша үткәрәһең бит инде. Ике кешене тап килтерерҙән алда уларҙың үҙҙәре менән ныҡлап танышырға кәрәк. Шуға арып, туҡтап торҙом, әммә бер аҙҙан, башҡорттар, мосолмандар араһында буйҙаҡтарҙың күплеге йөнә тынғы бирмәй башлағас, эште дауам итергә булдым. Был юлы – апайымдың ярҙамы, яңы көс, яңы ысулдар менән.

Танышып, ҡауышырға теләүселәрҙән анкеталарҙы әле лә “Бәйләнештә” ижтимағи селтәренән шәхси хат аша ҡабул итәм.

**– Ә анкета биреүселәр күпме? Кемдәр йышыраҡ мөрәжәғәт итә: ҡатын-ҡыҙмы, әллә ир-атмы?**

– Төркөмдә башлап ҡына ебәргән осорҙа йәш ҡыҙҙар күберәк яҙҙы, уларҙың иғландарын ҡуйҙым. Тора-бара олораҡ ағайҙар әүҙемләште, хәҙер инде башлыса оло апайҙар яҙа.

Ошо урында шуны әйтеп китергә мәжбүрмен: ҡайһы берәүҙәр үҙе тураһында яҙғанда ул-был һыҙаттарын әйтмәүҙе хуп күрә. Был минең эште байтаҡ тотҡарлай, ҡатмарлаштыра, уңайһыҙ хәлгә ҡуя. Кәләш айырғанмын, ситтә балам бар, эсеүҙе ташлар өсөн дауаланырға мәжбүр булдым, тигәнерәк урындарын да йәшермәһәләр ине. Мин бит ысын күңелдән ярҙам итергә әҙер, парын эҙләүселәр ҙә асыҡтан-асыҡ һөйләһен ине барыһын да. Эйе, яҙмыштар төрлөсә булып китә. Һәр ҡайһыһының хәленә кереп, өмөтөн бөтөнләй юғалтҡандарҙы йыуатып та, кәңәш биреп тә алырға тура килә. Ул яғы ла бар был эштә. Шулай ҙа “байрамдарҙа эсеп алам” тигәнерәк кешеләрҙең иғланын ҡуйыу минең өсөн бик ауыр. Миҙалдың ике яғы, тигән кеүек, ныҡ уйланам, күңел тулап-тулап ала. Әсмәгән, алдашмаған кешеләр, бигерәк тә мосолмандар менән эшләүе еңел миңә.



podpiska.pochta.ru

# Ғаиләм – ҡәлғәм

**– Бер-береһенә тап килерҙәйҙәрҙе нисек һайлайһығыҙ? Танышырға теләүселәр исемлеге ҙур ғына буғай һеҙҙә.**

– Эйе, был һандың артыуына ҡыуанырғамы, әллә ҡайғырырғамы, тип тә уйланып китәм ҡайһы мәлдә. Ҡыҙғаныска күрә, парһыҙҙар ифрат күп. Йәштәр араһында ла, ололарҙа ла. Үҙемсә бер нисә төркөм итеп күрәм уларҙы: ҡалала эшләп йөрөгән, юғары белемле, йәше утыҙға еткән ҡыҙҙар; тормошҡа сығып, балаһы тыуғас айырылған, ҡырҡҡа яҡынлаған яңғыҙ әсәйҙәр; шулай уҡ ҡырҡты ҡыуған, белемле, эшләп йөрөгән ир-егеттәр; иллене үткән, Себерҙә эшләгән олораҡ ағайҙар; балаларын үҙ аллы иткән, өйҙә яңғыҙ ғүмер кисергән, алтмышҡа етеп йә ул сикте үҙып барған апайҙар. Ғөмүмән, бүленеш ошолайыраҡ. Ҡалған төрҙәр ҙә бар, әлбиттә, тик улар аҙ күләмдә, тигәндәй.

Онотоп торам: ауылдарҙа йәшәп ятыусы ҡырҡты үткән ирҙәр ҙә – айырым бер мәсьәлә. Иғлан бирәләр, эшкә оҫталар үҙҙәре, тик уларға йәштәш ҡыҙҙар ауыл тормошон өнәмәй. Ҡала яғына тартылалар. Ә егеттәр ауылда төпләнгән, бәғзеләре олоғайған ата-әсәһен ҡарай. Һәр хәлдә, донъяларын ташлап, ҡалаға йүгереп сығып китә алмайҙар, тимәксемен.

Кемгә кем тап килерен бер минутта ғына уйлап бөтөп булмай. Башыма орлоҡ кеүек һалып алам ундай мәғлүмәтте, шунан эш араһындамы, юлдамы ҡапыл исҡә төшә лә уй килә: “Әй, анау егетте теге ҡыҙ менән таныштырғанда нисегерәк булыр икән?..” Димләү хаҡында уйҙар хәҙер гел минең менән бергә йөрөй.

**Әгәр, исмаһам, бер ғаиләнең генә Аллаһ ризалығы өсөн ғаилә ҡороуына сәбәпсе булам икән, миңә башҡа файҙа, килем кәрәкмәй ҙә.**

Бер саҡ ике бәләкәй бала менән апайымда ҡунаҡта булдым да таксиҙа ҡайтып барам. Шофер ағай оло, һүҙгә ихлас. Ике бала менән тығында тормаҫ өсөн, проспектҡа сыҡмай, икенсе уңайлы юл менән алып китеп бара, хәбәрен ҡоя бара. Баҡтиһәң, ҡырҡҡа еткән улы өйләнмәгән икән. Инде әсенеп һөйләй, ни өсөн буйҙаҡ булып йөрөгәнен аңларға ла тырыша... Ахырҙа, таныштырыу темаһы минең янда хәҙер тәүлек әйләнәһенә урала, тип көлөп ҡайтып индек өйгә.

**– Алыҫ райондар менән бәйләнеш нисек ҡоролған? Ғөмүмән, эшмәкәрлек географияһы ҡайҙарға йәйелгән?**

– Интернеттың иҫте китәрер заманы, тигәндәй. Сорғот та яҙа миңә, Ырымбур, Силәбе өлкәләренән дә хаттар яуа, үҙебеҙҙең республика ауыл-ҡалаларын әйтәһе лә түгел. Таныштырыу эшенә тотонғас та үҙҙәре димләү менән шөғөлләнгән бер нисә апайҙан хәбәр алғайным. Башланғысымды хуплап, изге теләктәр юллап, ярҙам тәҡдим итеп яҙҙылар. Рәхмәт инде уларға. Хәҙер селтәр кеүек эш итәбеҙ: улар үҙ тирәһендәге яңғыҙҙарҙы миңә әйтеп-әйтеп тора, мин үҙемә кәрәк йәштәге парһыҙҙарҙы һорап мөрәжәғәт итәм уларға. Күмәкләп дәррәү эшләйбеҙ. “Шул ир менән теге ҡатынды һөйләштерҙем. Ошо байрамдарҙа ҡатын ҡунаҡҡа килә, ир уны вокзалда ҡаршы аласаҡ”, – тигәнерәк хәбәр алһам, был матур тарихтың аҙағы хәйерле булһын инде, тип тулҡынланып торола.

**– Һеҙҙең аша танышып, өйләнеүселәр рәхмәтләме, араларында доғүә белдереп йөрөүселәр юҡмы?**

– Әлхәмдүлилләһ, тиҫтәләгән матур ғаилә барлыҡҡа килде, барыһының да хәлдәрен белешеп торорға тырышам. Рәхмәтләләр. Улар ғына түгел, туғандары, таныштары ла ихлас рәхмәт белдерә. Дуҫлашып бөтәбеҙ, ҡайһы берҙәре менән хатта яҡын туғандар кеүек аралашабыҙ, бер-беребеҙҙең уңыштарыбыҙ өсөн ҡыуанабыҙ.

## Беҙгә ярҙам итергә теләүселәр өсөн

**Ошо QR-код ярҙамында мобиль банк ҡушымтаһы аша “Бәрәкәт” журналы редакцияһы” коммерцияға ҡарамаған автономиялы ойошмаһы иҫәбенә матди ярҙам күсереп торорға мөмкин.**

**Аллаһ Тәғәлә биргән саҙаҡаларығыҙҙы ҡабул ҡылһын, ғаиләләрегеҙгә именлек, эштәрегеҙҙә бәрәкәт насип итһен, изгелектәрегеҙҙең әжерен күп тапҡырға арттырып ҡайтарһын! Әмин.**



podpiska.pochta.ru




# Һигеҙенсе дәрес:

# Доға – бер Аллаһтың хаҡы

Алдағы дәрестәребеҙҙең береһендә Аллаһ рәсүленең ﷺ Ноғман ибн Бәширҙән килгән хәҙисен иҫкә алған инек. Пәйғәмбәребеҙ ﷺ: “Доға – ул ғибәҙәт”, – тине һәм Аллаһтың аятын уҡыны: **“Раббығыҙ әмер бирҙе: “Мине саҡырығыҙ – Мин һеҙгә яуап бирермен. Дөрөҫлөктә, Миңә ғибәҙәт ҡылыуҙан тәкәбберләнеүселәр кәмһетелгән хәлдә Утҡа инерҙәр”** (“Ғафир” сүрәһе, 60-сы аят, әт-Тирмиҙи риүәйәтендәге хәҙис).

Һис шикһеҙ, бәндәләрҙең Раббыларына доға менән ялбарыуҙары иң фазыләтле ғибәҙәттәрҙең береһе булып тора. Ғибәҙәт иһә – бер Аллаһтың хаҡылыр.

Аллаһ Тәғәлә Бер үҙе бөтә ғаләмдәрҙе бар итте, ай, ҡояш һәм йондоҙҙарҙы яратты. Ул беҙгә киң ризыҡтар индерә, иртәләрен таңдар аттыра, көн менән төндө алмаштыра. Уның әмере менән фәрештә беҙгә йән алып төшә; Ул билдәләгән ваҡыт еткәс, әжәл фәрештәһе килеп, йәнебеҙҙе һурып ала. Ул бөтә ғаләм менән идара итә, диңгеҙ-йылғаларҙы ағыҙа, урман-ҡырҙарҙы үҫтерә, йыл фәсылдарын алмаштыра. Аллаһ Тәғәләнең был эштәрендә һис бер тиңдәше юҡ. Бөтә нәмә – Бер Уның ҡулында! Уның ҡөҙрәтенән, Уның сикһеҙ ғилеменән тыш ерҙә лә, күктә лә бер туҙан бөртөгө ҡәҙәр мәхлүк тә урынын һәм хәләтен үҙгәртә алмай. Намаҙ һайын ҡабатлап торған зикерҙәребеҙ менән беҙ ошо хаҡлыҡты таныуыбыҙҙы әйтәбеҙ: “Лә хәүлә үә лә ҡүүәтә иллә билләһ” (“Юҡтыр һис бер хәүл һәм көс-ҡеүәт, мәгәр бер Аллаһтан башҡа”).

Бөтә көс-ҡеүәттең бер Аллаһ ҡулында икәне аңлашыла. Әммә нимә һуң ул “хәүл” тигәне? Был һүҙҙең мәғәнәһен ғилем эйәләре шулай аңлаталар: “Ер һәм күктәрҙә үҙ урынын, үҙ хәләтен үҙгәртә алыусы һис бер зат юҡтыр, мәгәр Аллаһтың теләге, Уның ҡөҙрәте һәм рөхсәтенән башҡа”. Был зикерҙәрҙе ҡабатлап, беҙ бик ҙур һүҙҙәр әйтәбеҙ, әммә ҡайһы саҡ үҙебеҙ ҙә ни әйткәнебеҙҙе белмәйбеҙ.

Эйе, һәр бер ҙур һәм бәләкәй нәмә Аллаһ ҡулында, барыһы ла Уға ҡайта. Баҡсабыҙҙа үҫеп ултырыусы ағастағы япраҡ та Уның рөхсәтенән тыш ер өҫтөнә әҙәләп төшмәй. Аллаһ Тәғәлә әйтә: **“Уның ғилеменән башҡа ағастағы япраҡ та төшмәҫ, ер ҡуйынында бер бөртөк тә ҡасып ятмаҫ. Йәш булһа ла, ҡороған булһа ла – Асыҡ китапта иҫкә алынған”** (“Әл-Әнғәм” сүрәһе, 59-сы аят). Аллаһтың мәхлүктәрен юҡтан бар итеүҙә, бөтә ғаләмдәр менән идара итеүҙә һис бер тиңдәше булмаған кеүек, ҡолдарының да бөтә йәшерен һәм асыҡ ҡыла торған барса ғибәҙәттәренә бер Ул ғына лайыҡ. Уның Раббы булыуында тиңдәше булмаған кеүек, Илаһ булыуында ла тиңдәше юҡ.

Барлыҡ мәхлүктәр был хаҡлыҡты таныйҙар: ҡояш та, йондоҙҙар ҙа, йылға-диңгеҙҙәр ҙә,

**(Дауамы. Башы 3-сө һанда).**

podpiska.pochta.ru

үсемлектәр ҙә, хайуандар ҙа... Улар Аллаһҡа һис ваҡыт һис кемде тиңдәш ҡылмайҙар. Бер Уға тәсбих әйтеп, Уны ғына бөйөк тип һанайҙар. Әммә кешеләр генә, Аллаһтың ере буйлап йөрөп, Уның күге-ҡояшы аҫтында йәшәп, Ул биргән ризыҡтарҙы ашап, Уның һыуҙарын эсеп, Ул биргән һауаны һулап, үҙҙәренә Аллаһтан башҡа хужалар, табыныу өсөн башҡа илаһтар эҙләйҙәр. Ҡолдарҙың, Хаҡ Хужалары була тороп, үҙҙәренә башҡа хужа эҙләүҙәре, башҡаларға ғибәҙәт ҡылып, уларға ҡол булып йәшәүҙәре иң ҙур рәхмәтһеҙлек һәм иң ҙур ғәҙелһеҙлек түгелме?!

Ҡөрьәндән бер нәсихәт: **“Лоҡман үҙенең улына вәғәз буларaҡ әйтте: “Эй улҡайым, Аллаһҡа һис кемде тиңдәш ҡылма, сөнки ширек – Аллаһҡа кемде лә булһа тиңдәш итеү – ҙур ғәҙелһеҙлектер”** (“Лоҡман” сүрәһе, 13-сө аят). Бер Аллаһҡа ҡулдарын күтәреп, Бер Унан ғына һорайһы урынға, беҙгә түгел, үҙҙәренә лә ярҙам итә алмаған зәғиф таштарға, ағастарға, тауҙарға, ҡояш, ай һәм йондоҙҙарға, үҙ ҡулдары менән яһаған һүрәттәргә, һындарға, ниндәйҙер изге тип һанаған йәндәргә ялбарыу иң ҙур ғәҙелһеҙлек түгелме? Аллаһ Тәғәлә әйтә: **“Һеҙҙең Аллаһтан башҡа ялбарған заттарығыҙ һеҙҙең кеүек ҡолдарҙыр. Саҡырығыҙ уларҙы, доғаларығыҙға яуап биреп ҡараһындар, әгәр хаҡ юлда булһағыҙ”** (“Әл-Әғраф” сүрәһе, 194-се аят).

Аллаһ беҙгә Үҙенән генә һорарға әмер биреп, Үҙе яуабын вәғәҙә итә. Ни өсөн кешеләр ер өҫтөндә, Аллаһтан башҡа заттарға доға менән ялбарып, иң ҡурҡыныс гонаһҡа сумалар? Ер өҫтөнә килгән бөтә пәйғәмбәрҙәр бер Аллаһҡа ҡулдарын күтәреп доға ҡылдылар, үҙ ҡәүемдәрен дә шуға өндәнеләр, кешеләрҙең ялбарып һорай торған ялған илаһтарына ҡаршы көрәштеләр. Аллаһ Тәғәлә әйтте: **“Раббың әмер бирҙе: Миңә доға менән ялбарығыҙ, Мин һеҙгә яуап бирермен”** (“Ғафир” сүрәһе, 60-сы аят).

## Ширектең иң ҙур ишеге

Шуныһын да әйтергә кәрәк: мөшриклектең иң ҙур ишеге нәҡ доға ашалыр. Шуға күрә Аллаһтан башҡаға доға менән ялбарыусыларға Аллаһтың Китабында киҫәтеү бик ҡаты, хатта ҡайһы бер ғалимдар: “Ҡөрьәндә кешеләрҙе көфөрлөктән һәм мөртәтлектән иң күп киҫәтеүҙәр Аллаһтан башҡа заттарға доға менән мөрәжәғәт итеү хаҡында булды”, – тинеләр (Хәмед бин Насыр бин Ғөçмән).

Мәсьәлә бик тә мөһим һәм ҡурҡыныс булыу сәбәпле, Аллаһ кешеләр ныҡлап аңлаһындар өсөн был киҫәтеүҙәрҙе Китабының төрлө урындарында, төрлө рәүештә, төрлө ысулдар менән иҫкә алды.

● Аяттарҙың бер өлөшө бер Аллаһҡа ғына доғалар менән ялбарырға өндәй:

**“Раббығыҙға түбәнселек һәм йәшерен рәүештә мөрәжәғәт итегеҙ. Дөрөçлөктә, Ул сиктән ашыусыларҙы һөймәй. Ер өҫтөн тәртипкә һалғандан һуң, ул тәртипте боҙмағыҙ. Аллаһтың ғазабынан ҡурҡып, рәхмәтенә өмөт итеп, Уға доғалар менән ялбарығыҙ. Аллаһтың рәхмәте изгелек ҡылыусыларға бик яҡындыр”** (“Әл-Әғраф” сүрәһе, 55-56-сы аяттар).

**“Әйт: “Аллаһҡа йәки Әр-Рахмәнгә доға менән ялбарығыҙ, нисек кенә ялбарһағыҙ ҙа, Уның күркәм исемдәре барҙыр”** (“Әл-Исра” сүрәһе, 110-сы аят).

● Икенселәре Аллаһтан башҡа заттарға доғалар менән мөрәжәғәт итеүҙе тыя һәм уның буш үә файҙаһыҙ ғәмәл икәнен күрһәтә:

**“Аллаһтан башҡа һис кемгә доға менән ялбармағыҙ”** (“Әл-Джинн” сүрәһе, 18-се аят).

Ул заттар бер нәмәгә лә хужа түгелдәр. Нисек инде улар беҙгә нимәләр бирә алһын?! **“Әйт уларға: һеҙ Аллаһтан башҡа илаһ тип таныған заттарығыҙҙы саҡырығыҙ. Улар күктәрҙә лә, ерҙә лә бәләкәй генә бөртөккә лә хужа түгелдәр”** (“Сәбә” сүрәһе, 22-се аят).

Бәндәләрҙең ҡылған доғаларын бер Аллаһ ишетә, бер Аллаһ ярҙам итә. **“Бер Аллаһҡа – хаҡ доғалар. Ә Унан башҡаларға доға менән ялбарыусыларға ул заттары бер нисек тә яуап бирә алмайҙар”** (“Әр-Рәғд” сүрәһе, 14-се аят).

Ғәзиз ҡәрҙәштәрем, һәр ҡайһыбыҙ был нәмәнең хәтәрлеген аңларға, беҙҙең ҡылған барлыҡ доғаларыбыҙ һәм башҡа ғибәҙәттәребеҙ Бер Аллаһтың хаҡы икәнен белергә тейешбеҙ. Нисек итеп зәғиф бер мәхлүкте Бөйөк мөлкәт эйәһе, бар нәмәләр менән идара итеүсе Батша урынына ҡуйырға мөмкин? Аллаһ һаҡлаһын, әгәр мосолман кеше белә тороп был гонаһҡа инһә, бөтөнләй иманын юғалтып, кафыр булып китеүе бар. Уға уҡыған намаҙы ла, тотҡан ураҙаһы ла, ҡылған хажы ла файҙа бирмәç. Аллаһ Тәғәлә әйтә: **“Аллаһтан башҡа заттарҙы доға менән саҡырыусыларҙан да нығыраҡ хаҡ юлдан аҙашҡан кеше бармы? Ул заттар Ҡиәмәт көнөнә ҡәҙәр уларға яуап бирмәçтәр һәм доғаларынан ғафил булырҙар”** (“Әл-Әхҡәф” сүрәһе, 5-се аят).

Аллаһ ҡына беҙҙең моң-зарҙарыбыҙҙы ишетә, ихлас доғаларҙы ҡабул итә, бәлә-ҡазаға төшкәнгә ярҙамын бирә. Уның хикмәте сикһеҙ, әмере үҙгәреүһеҙ. Ул һораусыларға бирә, ауыр хәлдә ҡалыусыларға ярҙам итә. Әл-Бохари һәм Мөслим имамдар риүәйәт иткән хәҙистәрҙән билдәле булыуынса, Пәйғәмбәребеҙ ﷺ намаҙ уҡығандан һуң шундай һүҙҙәр әйтә торған булған: “Аллаһүммә, лә мәниға лимә әғтайтә үә лә муғтыя лимә мәнәғтә үә лә йәнфәғу зәл-джәдди минкәл-джәдду” (“Йә Аллаһ! Һин биргәндән һис кем мәхрүм итмәç, Һин тыйғанды һис кем бирә алмаç. Әллә ниндәй көс эйәһенең дә көсө Һинең ҡаршыңда файҙа килтермәç”).

**Йософ хәҙрәт Дәүләтшин.**

podpiska.pochta.ru

*Ризаитдин Фәхретдин мирасы*

# Ислам дине – еңел дин

## Хаҡлыҡ өҫтөндә буласаҡ төркөм




kitap.poсhta.ru

“Өммәтемдән бер төркөм хаҡлыҡ өҫтөндә булыр. Аллаһ Тәғәләнең әмере (ахырызаман һәм Ҡиәмәт көнө) килгәнгә ҡәҙәр шул хәлендә дауам итер” (*220-се хәҙис, әл-Бохари йыйынтығынан*).

### Шатлыҡлы хәбәр

Мосолмандар өҫтөнә ауыр көндәр киләсәге хаҡында хәҙистәр күп. Шуның менән бергә Ислам диненең сәләмәт торасағы һәм мосолмандарҙан бер төркөмдөң һәр ғасырҙа хаҡлыҡҡа һәм Ислам диненә хеҙмәт итәсәктәре хаҡында ла хәҙистәр бар. Бында зикер ителгән хәҙис шәриф тә шул йөмләнән. Бөтөн диндәрҙән өҫтөн буласаҡ бер “дин”гә эйәреүселәр араһында һәр ваҡыт бер төркөмдөң хаҡлыҡта дауам итәсәге тәбиғи.

**“Ул (Аллаһ) Исламды барса диндәрҙән өҫтөн ҡылыу өсөн Үҙ рәсүлен көслө һиҙәйәт һәм хаҡ дин менән ебәрҙе. [Мөхәммәттең пәйғәмбәрлегенә, Исламдың хаҡ дин икәнлегенә һәм уның өҫтөн буласағына] гуаһ булырға Аллаһ Үҙе етә!”** (“Әл-Фәтх” сүрәһе, 28-се аят)

## Милләт күтәрелһен өсөн нимәләр шарт?

Милләттәрҙең күтәрелеүҙәренә, бөтөн барлыҡтың серҙәренән хәбәрҙар булыуҙарына, донъя һәм ахирәт сәғәҙәтенә ирешеүҙәренә сәбәп булған шарттарҙың һәр береһе Ислам динендә бар. Был шарттарҙың ҡайһы берҙәре шулар:

***1) Аҡылдың хөрәфәт һәм төпһеҙ, яңылыш уй-фекерҙәрҙән саф булыуы.***

Сөнки был нәмәләр аҡыл менән хаҡиҡәт араһында пәрҙә булып тора, шул сәбәпле аҡыл менән хаҡиҡәт бер-береһенә күренмәй. Бының өҫтөнә был нәмәләр менән пәрҙәләнгән аҡыл үҙ вазифаһын үтәй алмай, һәр төрлө яңылыш уй-фекерҙәргә ышана. Бындай кешеләр ҡурҡыуға, икеләнеүгә һәм һәр нәмәнән шөбһәләнеүгә дусар була. Сәфәргә сыҡҡан ваҡыттарында юл арҡыры бер нәмә үтеп китеүҙән йәки ҡарға һәм һайыҫҡан кеүек ҡош тауышы ишетелеүҙән, тән тартыуҙан һәм төш күреүҙән шомланыусылар һәм шикләнеп йөрөүселәр – шундай аҡылдары пәрҙәләнгән кешеләр. Исламдың бөтөн нигеҙе аҡылды буш уй һәм хөрәфәттәрҙән һаҡлауҙан һәм һәр һүҙҙе уға ҡарап һөйләүҙән ғибәрәт. Ислам дине аҡылды тәүхид нуры менән нурландыра, ғаләмдә идара итеүсе яңғыҙ Аллаһ Тәғәлә Үҙе генә икәнлеген иғлан итә.

***2) Камиллыҡ булдырыу.***

Камиллыҡ булдырыу һәм милләттең һәр бер ағзаһының үҙен һәләтле һанауы һәм ҡулынан эш килә тип белеүе, “Аллаһ теләһә, башым Ғәрешкә терәлгәнсе күтәреләм” тип йөрөүе һәм шуға ышаныуы һәм тырышыуы милләттәрҙең сәғәҙәттәренә сәбәп икәнлегендә низағ юҡ. Шундай милләттәр генә донъяла бәхетле, рәхәт көн күреп, ер йөҙөнә хужа була. Әммә камиллыҡты булдырырға ҡыҙыҡмаған һәм үҙҙәренә ышанмаған, “Беҙҙең ҡулдан килмәй, ул эште беҙҙең халҡыбыҙ эшләй алмай” тип йөрөгән ҡәүемдәр шул фекерҙәре һәм ғәҡидәләренең тәьҫире менән көндән-көн түбән китә, бер кәмселектән икенсеһенә төшә бара. Ислам дине үҙенең эйәреүселәрен камиллыҡҡа дәғүәт итә, ғилем һәм мәғрифәт алырға бойора, бөтөн ер йөҙө инсандар мәнфәғәте өсөн бар ителгәнен хәбәр итә, һәр кем тырышлыҡ күрһәтергә тейеш икәнлеген белдерә.

***3) Иғтиҡад дөрөҫ булыу.***

Милләттәрҙең сәғәҙәттәренә сәбәп булған нәмәләрҙең береһе – иғтиҡад (күңелдәге ышаныс) дөрөҫ булыуы. Иғтиҡадтар фараз һәм самалауға, ата-бабаларҙан, әбейҙәрҙән ҡалған һүҙҙәргә, дәлилһеҙ нәмәләргә түгел, ә дөрөҫ дәлилдәргә ҡоролорға һәм һәр бер ғәҡидәнең дәлиле үҙе менән берлектә торорға тейешле. Шул ваҡытта ғына “аҡыл” үҙ эшен эшләүсе һәм үҙ вазифаһы башында тороусы булыр. Кешеләргә эйәреп, уй һәм самалауҙарға таянып иғтиҡад итеүселәрҙең аҡылдары буш һәм эшһеҙ ҡалыр. Эшһеҙ аҡыл менән башһыҙ әҙәм араһында айырма булмаҫ. Ислам диненең иһә был нөктәгә һәммә нәмәнән артыҡ әһәмиәт биргәнлеге мәғлүм. Ислам дине дәлилһеҙ иғтиҡад итеүселәрҙе, уй һәм самалауҙарға эйәреүселәрҙе шелтәләй һәм киҫәтә, уларҙы хайуан дәрәжәһендә күрә, бер шәрғи хөкөм бәйән иткән ваҡытында унан маҡсат ниндәй нәмә икәнлеген аңлатып үтә.

***4) Ғәҡидәләрҙең, әҙәптәрҙең, хөкөм һәм һәр төрлө ғәмәлдәрҙең халыҡтар мәнфәғәттәренә ярашлы булыуы.***

Ислам шәриғәтендә булған хөкөмдәр, әҙәп һәм ғәмәлдәр донъя йөҙөндә булған халыҡтарҙың мәғишәттәренә ярашлы икәнлеге ҡояш кеүек мәғлүм. Унда булған хөкөмдәрҙең нәтижәһе дин һәм нәфесте, аҡыл һәм абруйҙы, мал һәм йәнде һаҡлауҙан ғибәрәт. Әгәр Ислам диненә бер боҙоҡ нәмә йәки файҙаға ҡаршы бер эш ҡушыла торған булһа, ул нәмә ҡәтғи рәүештә Ислам диненән булмаҫ. Әгәр ҙә шундай бер эш Ислам ғалимдарына тағылһа, уның өсөн Ислам дине яуап бирмәҫ.

***5) Милләттең динле, ғилем һәм мәғрифәтле булыуы өсөн тырышыусы бер төркөмдөң булып тороуы һәм был төркөмдөң, һәр төрлө кәртәләргә иғтибар итмәй, үҙ юлында дауам ҡылыуы.***

Шундай бер төркөмдөң булыуы өммәттәрҙең сәғәҙәттәренә сәбәп икәнлеге мәғлүм. Сөнки былар һәр ваҡыт юлбашсылыҡ итеп торор, яҡшы һәм яман әхлаҡтар хаҡында милләткә мәғлүмәт биреп, ямандарынан нәфрәтләндерер һәм яҡшыларына ҡыҙыҡтырыр. Халыҡтар иһә ахирәт кәрәктәре хаҡында ла, донъя кәрәктәре хаҡында ла дәрес алыуға, өйрәнеүгә мохтаж. Мөғәллим булмағанда халыҡтар был дәрестәрҙе кемдәрҙән алһын? Араларында милләттәрҙең холоҡтарын төҙәтеп, нәфестәрен таҙартып тороусы мөғәллимдәр булмаһа, быны форсат белеп, шайтан мөғәллимлек ҡыла башлар һәм аҙғынлыҡ диңгеҙенә батырыр. Был эш милләттең сәғәҙәтенә түгел, ә бәхетһеҙлегенә сәбәп булыр. Шуның өсөн милләт эсендә яҡшылыҡҡа бойороп, яман эштәрҙән тыйып, диндәрҙе өйрәтеп, донъяларҙы белдереп, ғилем һәм мәғрифәт тураһында юлбашсылыҡ итеп тороусы бер төркөмдөң булыуы лазым. Был нәмә – Ислам диненең терәктәренең береһе.

Был урында зикер ителгән хәҙис шәрифтәге төркөмдән маҡсат Ҡөрьән һәм хәҙис әһелдәре буласағы үҙенән-үҙе мәғлүм.

**(“Джәүәмиғүл-кәлим” шәрхе” йыйынтығы буйынса, “Ваҡыт!” нәшриәте мөхәррирләүендә).**



podpiska.pochta.ru

*Балаларға уҡығыҙ*

# Орлоҡҡа ҡарап фәһем ал



sportsweek.org

## Хикәйә

Ильяс тынысланa алмай иланы ла иланы. Уның яратҡан футболсыһы, берҙән-бер кумиры, автоһәләкәткә тарып, үлеп ҡуйған бит. Малайға бөгөн бөтөн донъя ҡыйралғандай, йәшәүҙең мәғәнәһе ҡалмағандай тойола.

Кисә генә Ильяс үҙ кумиры уйнаған матчты мауығып ҡарап ултырғайны. Ни тиклем шәп йүгерә ине ул футбол яланы буйлап, голды ни хәтлем оҫта сәпәне! Ә бөгөн...

Их, яратҡан футболсыһы менән танышырға өлгөрмәне! Шул тиклем хыяллана ине бит күрергә. Бүлмәһен уның һүрәттәре төшөрөлгән плакаттар менән тултырҙы. Яңыраҡ Ильяска ошо мәшһүр һөжүмсенекенә оҡшаған кейем һатып алып бирҙеләр, һәм ул урам буйлап шул кейем менән тиңдәштәрен көнләштереп үтеп китә торғайны. Сәсен кумирыныҡына оҡшатып алдырҙы. Ә хәҙер... Ул инде юҡ! Башҡа бер ҡасан да булмаясаҡ...

Ильяска шул саҡ шомло, ҡурҡыныс булып китте: “Тимәк, мин дә берәй ҡасан булмаясаҡмын бит... Атайым, әсәйем дә...” Ул, һиҫкәнгәндәй, күҙ йәштәрен һөрттө лә икенсе бүлмәгә сыҡты. Унда, төнгө сменалағы эштән ҡайтып, атаһы ял итә. Шул ҡәҙәрем тыныс йоҡлай, хатта тын да алмаған һымаҡ. Малай уның яурынына ҡағылды.

– Аһ! Нимә булды?.. Сәғәт нисә? – Атаһы күҙҙәрен асты. Шунан, сәғәтте ҡарағас, улын шелтәләп алды: – Нишләп уяттың?!

– Ғәфү ит, атай. Мин бит... Ней тип уйлағайным...

– Уйлағайным, уйлағайным... – Атаһы икенсе ҡабырғаһына әйләнде.

Ильяс уның тере булыуына ҡыуана ине. Ярай, берәй мәл һөйләшергә ваҡыт табыр...

Малай аш-һыу бүлмәһенә йүнәлде. Унда әсәһе төшкө аш әҙерләп йөрөй.

– Әсәй, ә бөтә кешеләр ҙә үләме? – тип һораны Ильяс.

– Эйе, улым, – тине әсәһе, уны ҡосоп. – Ә нимә булды? Иланыңмы ни? Бахыр балам, йәл шул ул егет, кем генә ине әле исеме...

Әлбиттә, әсәһе футболсының исемен белмәй ине.

– Әсәй, ә үлем нисек була ул? – тип икенсе төрлө һорау бирҙе малай.

– Аллаһ ҡына белә, улым. Гел генә ул турала уйлап йөрөһәң, аҡылдан яҙырһың. Башыңды ватма юҡ менән. Ана, бәлеш аша.

– Юҡ, бер ҙә ашағым килмәйсе. Урамға сығып киләм...

Тышта еңелерәк ине. Ҡояш әлегә нык ҡыҙҙырмай, шулай ҙа сейәнең бер нисә емеше аллана башлаған... Яҡындағы буш аҡланда малайҙар туп тибеп уйнай... Элегерәк булһа, Ильяс уларға йүгереп барып ҡушылып китер ине, тик бөгөн бөтөнләй футбол уйнағыһы килмәй.

Ул уйланып торған арала тыҡырыҡ борolошонда Мостафа күренде.

– Сәләм! Ҡайҙа китеп бараһың? – тип ҡысҡырҙы Ильяс.

– Үә ғәләйкүм әссәләм! Мәсеткә, дәрескә, – Мостафаның кәйефе шәп ине.

– Ниндәй дәрес ул каникул мәлендә? Нимә уҡыталар инде?

– Әйҙә һуң, һин дә бар. Бергә тыңларбыҙ. Бер кемгә лә инеүҙе тыймайҙар бит.

– Кем йөрөй һуң тағы?

– Ун кешебеҙ: беҙҙең урамдан Ғәли, Диләүир, шулай уҡ Мәхмүт... Кемдең атай-әсәйе мәсеткә йөрөй, шулар инде.

Ә Ильястың атаһы ла, әсәһе лә мәсеткә йөрөмәй. Ул бер нисә тапҡыр, ҡыҙыҡһынып, ул

podpiska.pochta.ru

йортҡа инергә уҡталып ҡуйҙы, ләкин ҡыйыулығы етмәне. Был юлы, саҡырғастар ни, ҡойма аша һикереп сыҡты ла Мостафаға эйәрҙе.

Мәсеттең аҡ манараһы әллә ҡайҙан күренеп тора. Тәүҙә ул яҡҡа йылдам ғына атлап барһа ла, Ильяс, ишек төбөнә килеп еткәс, баҙап ҡалды. Шул саҡ Мостафа: "Әйҙә, ҡурҡып торма!! – тип уны арҡаһынан этскә ҡарай еңелсә генә этте.

Аяҡ кейемдәрен сискәс, киң һәм яҡты залға үттеләр. Мәсеттең иҙәненә йөшел балаҫ түшәлгән. Тәҙрә яғындараҡ бер нисә малай менән һаҡаллы ағай ултыра. Дәрес башланып тора икән.

– Әссәләмү ғәләйкүм! – тип тыныс ҡына сәләм бирҙе Мостафа менән Ильяс. Уҡытыусы:

– Үә ғәләйкүм әссәләм! Ултырығыҙ, егеттәр, – тине лә аңлатыуға кереште: – Бөгөн дәрестә әңгәмә рәүешендә үткәрергә булдым. Кемде ниндәй һорау борсой, тартынмағыҙ, әйтегеҙ. Ин шәә Аллаһ, яуап бирергә тырышырмын. Әгәр үҙем яуап бирә алмаһам, күмәкләп фекерләрбеҙ. Йә, кемегеҙ беренсе?

Барыһы ла шымып ҡалды. Ильяс һорау бирергә теләй ине, тик бер нисек тә ҡыймай. Уҡытыусы быны уның күҙҙәренән һиҙҙе буғай:

– Исемең нисек һинең?

– Ильяс, – тине малай, бер аҙ уңайһыҙланып.

– Ә мин Әхмәт ағайығыҙ булам. Ниндәйҙер һорау бирергә теләйһең шикелле.

– Эйе, – тине Ильяс. – Шуны белгем килә: нимә ул үлем? Һәм... нимә өсөн йәшәйбеҙ? Барыбер бөтәбеҙ ҙә үләсәкбеҙ бит.

– Беләһеңме, ысынлап та, Аллаһ беҙҙе шундай итеп яратҡан: һәр кем үлем аша үтергә тейеш. Аллаһ беҙгә ғүмер бирә һәм уны теләгән мәлдә кире тартып ала.

– Нисек инде... Үлем аша үтә, тинегеҙ. Унан һуң тағы берәй нәмә бармы?

– Эйе, Ильяс. Үлем бик оҙаҡ йоҡлауға оҡшаған. Унан һуң барыһы ла, уянғандай, аңына киләсәк. Был донъялағы йәшәү бөткән Ҡиәмәт көнөндә ер йөҙөндә йәшәп киткәндәрҙең һәммәһе лә – иң беренсе кеше булған Әҙәмдән алып иң һуңғыһына тиклем – терелтеләсәк.

– Һәм мин дә... һәм... – Малай һәләк булған футболсының исемен атарға ынтылды ла ниңәлер тыйылды.

– Эйе, әлбиттә. Аллаһтың ихтыяры һәм хикмәте шундай. Быны орлоҡ менән сағыштырып ҡарарға мөмкин: ул тупраҡҡа төшә лә үлә, әммә эсенән яңы үсемлек шытып сыға.

– Кешеләр ҙә шул үсемлектәр һымаҡ ерҙән тамырланып килеп сығырмы икән? – тип һораны араларында иң бәләкәйе булған Абдулла. Бөтә малайҙар уның бер ҡатлылығынан көлөргә кереште.

– Юҡ, Аллаһ һәр ҡайһыбыҙҙы, әлеге тормошонда ниндәй зат булһа, шул килеш терелтәсәк.

– Улай булыуы мөмкинме ни? – тип аптырап китте Ильяс.

– Аллаһ өсөн башҡара алмаҫлыҡ ғәмәл юҡ, – тине уҡытыусы. – Уйлап ҡарағыҙ: Ул кешеләрҙе, йәнлектәрҙе, ағастарҙы, тауҙарҙы, болоттарҙы, планеталарҙы барлыҡҡа килтергән.

Мостафа ла әңгәмәгә ҡушылды:

– Барыһы ла терелтелгәс, нимә буласаҡ?

– Хөкөм көнө. Һәммәбеҙ ҙә Аллаһ алдында үҙенең был донъялағы ғәмәлдәре өсөн яуап бирәсәк. Кешеләрҙең яҡшылыҡтары ла, яманлыҡтары ла үлсәүгә һалынасаҡ; әгәр тәүгеләре ауырыраҡ тартһа – Ожмахта рәхәтләнеп йәшәү, икенселәре еңһә, Тамуҡта яныу көтә. Шуға ла ғүмер юлын мөһим имтихан менән сағыштырырға мөмкин, унда һәйбәт һәм насар билдәләрҙе Аллаһ Тәғәлә ҡуя. Беҙҙең төп тормошобоҙ нәҡ шул донъяла, йәғни үлгәндән һуң терелтелгәс, башлана.

Дәрескә килгән малайҙар өндәшмәне, уйға бирелде.

– Әммә изгелектәр ҡылыу ғына мөһим түгел, – тип дауам итте Әхмәт ағай. – Аллаһтың тоғро ҡоло – мосолман – булырға кәрәк. Ә уны нисек аңлайһығыҙ?

– Көн һайын биш мәртәбә намаҙ уҡырға, Рамаҙан айында ураҙа тоторға, зәкәт түләргә, Мәккәгә хаж ҡылырға... – Малайҙар кире йәнләнеп китте.

– Дөрөҫ, шулай ҙа һеҙ төп талапты онотторғоҙ: Аллаһтан башҡа илаһ юҡ һәм Мөхәммәт пәйғәмбәр Уның ҡоло һәм рәсүле икәнен таныу. Быуна һин, Мәхмүт, нисегерәк аңлайһың был һүҙҙәрҙе?

– Теләһә ниндәй боттарға йәки ҡояшҡа, айға табынырға ярамай...

– Кешенең ниндәйҙер таш һынға йәки күк есемдәренә генә түгел, берәй данлыҡлы спортсыға йәки йырсыға ла табына башлауы ихтимал, – тип төшөндөрҙө уҡытыусы. – Ул кумирына ҡарап һоҡлана, танышырға һәм яҡын дуҫына әйләнергә ине, тип хыял ҡора. Аллаһ хаҡында онотҡас, ҡәҙимге бер кешенең ҡолона әүерелә. Бындай әҙәм балаһына Ҡиәмәт көнөндә бик ауыр буласаҡ, сөнки ул ҙур гонаһ ҡыла – Аллаһ Тәғәлә тарафынан бар ителгән затты үҙе өсөн илаһҡа әүерелдерә.

Ильяс ҡыҙарынды. Кумирым тигәне ябай ғына кеше булған бит! Көнө-төнө шул футболсы тураһында уйлап, уның менән уйында ғына һөйләшеп, күрешергә хыялланып йәшәне бит әле... Ҡиәмәт көнөндә әлеге ҡылығы тураһында Аллаһ Тәғәләгә ни әйтер?

Был ваҡытта уҡытыусы Ожмахта тормоштоң ни хәтлем матур һәм еңел буласағы тураһында һөйләй ине. Ильястың ҡурҡыуы ҡыуаныс һәм өмөт менән алышынды. Хәҙер белә ул: үлем менән йәшәү тамамланмай, алда мәңгелек гүзәллек көтә. Тик уны яулап алыу өсөн Аллаһтың ризалығына лайыҡ мосолман булырға тырышыу зарур.

Ильяс өйөнә ҡайтып барышлай үҙе өсөн мөһим ҡарар ҙа ҡылды: ата-әсәһен мотлаҡ мәсеткә килтерәсәк, сөнки улар менән киләһе тормошта Ожмахта осрашырға теләй.

**Б. Рөстәмова.**



podpiska.pochta.ru

# Малайҙарҙы ниңә “бабаға ултырталар”?


smartik.ru

Беҙҙә – “сөннәтләү” йәки “бабаға ултыртыу”, ә ғәрәптәрҙә “хитан” тип аталған был ғәмәл ир баланың енес ағзаһы осондағы тиреһен ҡырҡып алып ташлауҙан ғибәрәт. Ул халҡыбыҙ тарафынан Ислам дине аша ҡабул ителгән һәм элек киң таралған булған. Үткән быуаттың 70-се йылдарында ла башҡорт ауылдарында малайҙарҙы, төрлөсә әүрәтеп, сөннәтләүгә алып барғылағандар, әле иһә был – һирәк күренеш.

Пәйғәмбәребеҙ ﷺ ейәндәрен тыуғандан һуң ете көн үтеүгә сөннәтләгән. Ҡайһы бер сәхәбәләр был ғәмәлде Ислам динен ҡабул иткән саҡта мотлаҡ башҡарыуҙы хуп күргән. Әл-Бохари һәм Мөслим йыйынтыҡтарындағы хәҙистәрҙә әйтелеүенсә, Ибраһим пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) иһә хитанды 80 йәшлек сағында үҙенә үҙе эшләгән. Һәр хәлдә, сөннәтләүҙе ир бала бәлиғ йәшкә еткәнсе атҡарып ҡуйыу хәйерле, сөнки аҙаҡ тире ҡалыная, ауыртыу көслөрәк була.

Фәнни яҡтан ҡарағанда, сөннәтләүҙең сәләмәтлеккә лә, енси тормошҡа ла ыңғай йоғонтоһо ҙур.

- Бабаға ултыртылмаған иргә енес ағзаһының тиреһе аҫтында ауырыу тыуҙырыусы микроорганизмдар тупланыуы янай. Сөннәтләнгәндән һуң таҙалыҡты һаҡлауы еңеләйә.
- Енес ағзаһының осондағы тирене ҡырҡып ташлау малайҙарҙы шулай уҡ фимоз һәм парафимоз һымаҡ сирҙәрҙән арындыра.
- Һуңғы йылдарҙа үткәрелгән клиник һәм эпидемиологик тикшеренеүҙәр раҫлауынса, бабаға ултыртылмаған ир-аттың һейҙек каналы 11 (!) тапҡырға йышыраҡ шешеп, ауырта. Ундай саҡта медицина белгестәренә мәжбүри сөннәтләргә тура килгеләй.
- АҠШ ғалимдарының докладына ҡарағанда, бәләкәй сағынан уҡ бабаға ултыртыу малайҙарҙы енес ағзаһында яман шеш (рак) барлыҡҡа килеүҙән дә һаҡлай.
- Сөннәтләнгән ирҙәрҙә СПИД йоҡтороу хәүефе 8 тапҡырға кәмерәк.

Күп кенә халыҡтарҙа ир баланы бабаға ултыртыу уңайынан байрам ойоштороу йолаһы бар. Ҡайһы бер төбәктәрҙә тотош ауылды йыйып ҡунаҡ итәләр, сөннәтләнгән малайҙарға ҡиммәтле бүләктәр бирәләр хатта. Әлбиттә, камиллыҡҡа ынтылабыҙ, нәҫелебеҙҙең сәләмәт булыуын теләйбеҙ икән, әлеге йола беҙҙә байрам тойғоһо ғына уятырға тейештер.

podpiska.pochta.ru

# Куллама




Был аш майлы иткә һалма һәм йәшелсә (кишер, һуған) ҡушып әҙерләнә. Табынға эҫе көйө бирелә. Йәшел һуған, укроп, петрушка өҫтәргә була.

Кулламаның беҙҙең яҡта киңерәк таралған рецебын тәҡдим итәбеҙ. Һарыҡ, һыйыр йә йылҡы итен һайлағыҙ.

## Кәрәк буласаҡ:

- майлы ит – 450 грамм
- һуғанбаш – 3 дана
- кишер – 1 дана
- һалма – 250 грамм
- петрушка тамыры
- аҡ май – бер ҡалаҡ
- төмәнә ҡарап, төйөлгән ҡара борос һәм тоҙ, аҙаҡ өҫтәү өсөн йәшел петрушка, һуған, укроп.

## Әҙерләү тәртибе:

- Итте ҙур өлөштәргә киҫкеләп, өҫтөнә һалҡын һыу ҡойобыҙ ҙа бешерергә ҡуябыҙ. Ҡайнап сыҡҡас, утын кәметеп, сәғәт ярым тирәһе талғын ғына бешерергә кәрәк. Өҫтөнә күбекләнеп сыҡҡан туртаһын алып торорға онотмағыҙ.
- Һуғанбаштарҙың береһен, ҡабығынан таҙартып, духовкала йәки суйын табала ҡара юлаҡтары барлыҡҡа килгәнсе бешекләп алабыҙ ҙа ҡайнап торған һурпаға һалабыҙ. Янына таҙартылған кишерҙе, йыуылған петрушка тамырын да төшөрәбеҙ. Самалап тоҙ, ҡара борос өҫтәйбеҙ. Барыһын бергә йәнә ярты сәғәт тирәһе бешерәбеҙ.
- Утты һүндереп, бешкән итте сығарып алабыҙ ҙа 20-30 грамлыҡ өлөштәргә шаҡмаҡлап турайбыҙ. Киҫәктәрҙе табынға биргәнсе ҡайнар һурпа эсендә тоторға кәрәк. Бешкән һуғанды, петрушка тамырын ташларға ла ярай, кишерҙе иһә шаҡмаҡлап йәки түңәрәкләп теләбеҙ.
- Һурпаны айырым кәстрүлгә ҡойоп, шуның эсендә һалманы тиҙ генә бешереп алабыҙ. Әҙер булғас, тишекле сүмес менән һөҙөп сығарып, һалмаға иретелгән аҡ май һөртәбеҙ.
- Ҡалған һуғандарҙы оҙонса итеп киҫеп, өҫтөнә эҫе һурпа ҡойобыҙ.
- Табынға биреү өсөн тәүҙә тәрилкәләргә һалма, кишер, ит, һуған һалабыҙ, шунан ҡайнар һурпа өҫтәйбеҙ.

Ҡулламаны һәр кем, үҙенә нисек оҡшаһа, шулай ашай ала. Ваҡлап киҫелгән йәшел һуған, петрушка, укроп һибергә, әгәр булһа, ҡатыҡ йә ҡорот ҡушырға мөмкин.

podpiska.pochta.ru

# “Ҡарама беләккә, ҡара йөрәккә”



Вилдан Мәзитов әҙерләне.

**Горизонталь буйынса:** 1. Рәсәйҙә монгол тамырҙарын һаҡлаған милләт. 3. Туя белмәҫ кешене элек “бирән ...” тигәндәр. 5. Ҡарышлауыҡтан олораҡ, күбәләктән йәшерәк. 7. Йоҡламай, тимәк, ... 8. Бик боронғо ҡәбилә, иң ҙур башҡорт ырыуҙарының береһе. 10. Башҡорттарҙың береүҙәре – өлкән ирҙәргә, икенселәре олораҡ ҡатындарға шулай өндәшә. 11. Был үләнде ғалимдар иң боронғо үҫемлектәр иҫәбенә индерә. 13. Һөттөң өҫтөнә сыға. 14. Ялмандың икенсе “исеме”. 17. Океандың, диңгеҙҙең, йылғаның йәки күлдең ҡоро ергә ныҡ ҡына үтеп ингән урыны. 19. Балыҡтың һөйәге. 21. Ҡарҙың бер төрө. 23. Зат, нәҫел, ... 24. Ихтыяж, мохтажлыҡ, ... 27. XIV быуаттағы Алтын Урҙа ханы Тимер-... 30. Ҡасҡан саҡта нимәне “һыртҡа һалалар”? 33. Тау битләүен шулай тип тә атайҙар. 36. Нимә ул сүллек? 38. Силәбе өлкәһенең башҡорттар күпләп йәшәгән районы. 41. Дала төлкөһө. 42. Бысаҡ үткерләгес.

**Вертикаль буйынса:** 1. Балыҡ аулау ҡоралы. 2. “Батыр берҙе үлер, ... меңде үлер” (мәҡәл). 3. Ҡуҙ өҫтөнә ҡуйып бешерелгән ит. 4. Байрам булһа, ғәҙәттә, нимә ҡоялар? 5. Телмәрҙә “ҡара”, “ҡаты” кеүек сифаттарҙы көсәйтеү өсөн ҡулланылған киҫәксә. 6. Осор, мәл, ... 8. Әкиәттә Һаранбай менән Дәүләтбай, оҙаҡ йоҡлап, ниндәй һыйҙан ҡолаҡ ҡаға? 9. Шәл бәйләгәндә, ашъяулыҡ йә янсыҡ теккәндә йыш ҡына ситтәрендә биҙәк итеп шуны эшләйҙәр. 11. Оҫта кешенең нимәһе алтынға тиңләнә? 12. “Бәлә – ... аҫтында” (әйтем). 15. Бур. 16. Ҡыҙ һоратыу өсөн буласаҡ ҡоҙаларға ебәрелгән вәкил. 17. Төрки халыҡтарға хас булған халыҡ йыйыны. 18. Нимә ул ҡапсыҡ? 19. Далала үҫеп, ҡороғандан һуң ел ыңғайына йомғаҡ булып тәгәрәп йөрөүсе үҫемлек. 20. “Йәшәгән, ти, ҡарт менән ...” 21. “Ябығып, ... һөйәккә ҡалды”. 22. Белорет районындағы киң билдәле ауыл. 25. Йоптоң киреһе. 26. “Ике дуҫтың береһе ... була” (әйтем). 28. Ас түгел. 29. “Эшләмәй, ... да ҡыбырлатмай”. 31. Өлкән, ҙур, ... 32. Унын ағаста ла, маңлайҙа ла үҫеп сығыуы бар. 34. Күңелсәк, шаян, ... 35. “Күҙ менән ... араһында”. 36. Күплекте аңлатҡанда йыш ҡулланылған һан. 37. Һуғандың бойҙай йәки күрән менән нимәһе уртаҡ? 39. “Яулағанда тыныслыҡ булһын ҡулда ҡылыс ...” (Рәми Ғарипов). 40. Көрт нимәнән ғибәрәт?

## “Ауылым, ауылҡайым...” кроссвордының яуаптары

**Горизонталь буйынса:** 1. Көрәк. 6. Киҫкә. 8. Үгеҙ. 9. Көпө. 10. Бәйөр. 12. Септә. 13. Сейә. 14. Епшек. 15. Кубә. 16. Мышы. 18. Әтәс. 22. Тумырҡа. 23. Баҙлауыҡ. 25. Айыу. 26. Көрт. 31. Урау. 33. Йылҡы. 34. Йүкә. 35. Ябаға. 36. Ләпәк. 37. Мәке. 38. Ҡаҡы. 39. Ишара. 40. Мисәү.

**Вертикаль буйынса:** 2. Өсөнсө. 3. Күркә. 4. Кендек. 5. Сөрәкә. 6. Көсөк. 7. Кәтмән. 11. Ҡашҡар. 17. Шыршы. 19. Төлкө. 20. Туп. 21. Ҡыш. 24. Ҡаулан. 27. Туҙбаш. 28. Өйәңке. 29. Һыуһар. 30. Нәсәбә. 32. Урама. 34. Йылым.